# *Башланғыс мәктәптә текст өстөндә эш буйынса ҡайһы бер методик кәңәштәр*

*Башҡорт теле уҡытыусыһы Кәримова Г.Я.*

Туймазы, 2008

Рассмотрено и утверждено на заседаниии ПЦК филологических дисциплин

Протокол № 12 от «12» января 2008 г.

Одобрено на заседании методического совета ГОУ СПО «ТПК»

Протокол № 6 от «17» апреля 2008 г.

Учебно-методический комплекс составлен:

Каримовой Г.Я.., преподавателем башкирской литературы

Составитель: Каримова Г. Я., преподаватель башкирского языка и литературы

Рецензенты: Фатихова З. С., преподаватель башкирского языка и литературы высшей категории ГОУ СПО ТПК

Давлетбирдин М. Т., преподаватель высшей категории гимназии № 1 г. Туймазы

## Башланғыс мәктәптә текст өстөндә эш буйынса ҡайһы бер методик кәңәштәр

Текст уҡыу ҡыҙыҡлы һәм файҙалы булһын өсөн, һәр дәрестә төрлө эштәр ойоштороla. Шуларҙың ҡайһы берҙәрен ҡарап үтәйек.

Методистар билдәләүенсә, тексты уҡыу һәм уның йөкмәткеһен үҙләштереү түбәндәге тәртиптә ойоштороla.

1. Инеш әңгәмә
2. Һүҙлек эше
3. Тәү тапҡыр тексты байҡап уҡыу.
4. Әҫәргә беренсе анализ.
5. Тексты уҡытыусының биреме буйынса икенсе ҡат уҡыу.
6. Тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү.
7. План төҙөү.
8. Йөкмәткене һөйләү.
9. Тексҡа икенсе ҡат анализ яһатыу. Уҡыған әҫәргә синтез яһау.
10. Айырым ҡатнашыусыларға телдән характеристика төҙөү.
11. Тексҡа бәйле ижади эштәр үткәреү.
12. Тексты тасуири уҡыуға әҙерлек. Тасуири уҡыу.

1. **Уҡыуға әҙерлек. Инеш әңгәмә.** Ул һәр әҫәрҙе өйрәнер алдынан үткәрелергә тейеш. Күләме, йөкмәткеһенә ҡарап, төрлөсә була (5-20 мин.).

Уның төп маҡсаты – уҡыусыларҙың иғтибарын яңы темаға көйләү, алда үтеләсәк яңы әҫәргә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Йөкмәткеһенең характерына ҡарап, түбәндәге төрҙәргә бүләләр.

1. Тарихи белешмә биреү әҫәрҙә авторҙың үҙе йәшәгән осор һүрәтләнгән осраҡта ҡулланыла. Уҡытыусы яҙыусының үҙе йәшәгән дәүере, әҫәр яҙылыу тарихы тураһында белешмә бирә.

2. Тарихи һәм социаль көнкүреш шарттарға аңлатма әҫәрҙәргә хәл-ваҡиғалар автор йәшәгән ваҡыттан элегерәк осорҙо сағылдырғанда ҡулланыу өсөн уңайлы. Уҡыласаҡ әҫәрҙә балаларға таныш булмаған ваҡиға, күренештәр осраһа, уҡытыусы үҙе һөйләй.

3. Биографик хикәйәләү, өйрәнеләсәк әҫәр автобиографик характерҙа булғанда, өлөштөң бындай төрөндә яҙыусының тормош юлындағы эпизодтарҙың үтеләсәк әҫәргә ҡағылышлылығына нығыраҡ туҡталыу маҡсатҡа ярашлы. Тексты

уkыр алдынан унның авторы хаkында белешмә биреү китаптарынан күргәҙмә әҙерләү кәрәк.

Уkытыусыларға был этапта түбәндәге методик алымдар тәkдим ителә

1. Уkытыусы һүҙе.

2. Уkыусыларҙың тәьҫиренә kоролған әңгәмә. Текстың йөмәткеһе балаларға таныш ваkыға хаkында барһа, дәрестең инеш өлөшөндә уларҙың үҙҙәренән һөйләтергә мөмкин. Уkытыусы буласаk текст өсөн кәрәкле белешмәне әңгәмә юлы менән ала.

3. Сәнғәттең әҫәр йөкмәткеһенә ауаздаш булған бүтән төрҙәренә мөрәжәғәт итеү.

Мәҫәлән, көҙ хаkында шиғырҙы уkыр алдынан картиналар, репродукциялар һ.б. kарау аша балаларҙың ошоға тиклем алған белемдәре системаға һалына, әҫәрҙе аңлау өсөн ерлек әҙерләнә. Аудио яҙма тыңлау шиғырҙы уkыу өсөн эмоциональ фон тыуҙыра.

4. Алдан бирелгән ижади эштәрҙе тикшереү. Балаларҙың көндәлек тормошона, мөхитенә яkынырак хәл-ваkиғаларҙы сағылдырған әҫәрҙәрҙе өйрәнгәндә, бер-ике дәрес алдан класkа телдән йәки яҙма эш бирелә. Һөҙөмтәлә, ошо эштәрҙе тикшереү аша әҫәрҙең үҙенә яkын килеүгә шарттар тыуа.

5. Әҙәби экскурсиялар. Яҙыусы йорт-музейына, күренекле яҙыусыларҙың исемдәренә бәйле төбәктәргә, бынан тыш, тәбиғәткә экскурсиялар тәьҫораттарын да әҙәби маkсаттарҙа уңышлы файҙаланып була.

**2. Һүҙлек эше.** Уkыу алдынан аңлатыласаk һүҙҙәр һаны биш-алтынан артмаһын. «5-9 кластарҙа башkорт телен уkытыу методикаһы» /Аҙнағолов Р.Ғ. редакцияһында / [7.264] дәреслегендә һүҙлек эшен ойоштороуҙа 2 төр күнегеүҙәр күрһәтелгән.

*Һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатыуға нигеҙләнгән күнегеүҙәр:*

1) һүҙҙең логик билдәмәһен биреү;

2) синоним, антоним, омонимдарҙы миҫал итеп килтереү;

3) мәғәнәһе аңлашылмаған һүҙҙәрҙе контексkа kуйыу;

4) яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен уларҙы уkыусылар элек үҙләштергән һүҙҙәр менән сағыштырыу, морфемаларын анализлау;

5) һүҙ өҫтөндә эшләгәндә һүҙлектәр файҙаланыу

*Һүҙҙәрҙе kулланырға өйрәтеү күнегеүҙәре*

1. Һүҙҙәрҙе айырым билдәләренә ҡарап төркөмләү күнегеүҙәре (семантик, грамматик, тематик һ.б.)

2. Күнегеү тексындағы йәки әҙәби әҫәрҙәге һүҙҙәрҙең ҡулланылышын күҙәтеү.

3. Һүҙҙәрҙе синонимдары менән алмаштырыу күнегеүҙәре.

4. Бирелгән һүҙҙәр ярҙамында һөйләмдәрҙе тарҡауландырыу йәки һөйләмдәрҙе ябайлаштырыу, тейешле конструкциялар төҙөү күнегеүҙәре.

Уҡытыу урыҫ телендә барған мәктәптәрҙә һүҙлек эшенә айырыуса иғтибар бүлергә кәрәк. Һүҙҙәрҙе аңлатыу, хәтерҙәрендә ҡалдырыу һәм һөйләмдә ҡулланыу өсөн беҙ түбәндәге алымдарҙы тәҡдим итәбеҙ.

1. Таҡтала бирелгән һүҙҙәрҙәге орфограммалар икенсе төҫ менән яҙылһын. Мөмкинлек булһа, ҡағиҙәләр иҫкә төшөрөлә.

2. Һүҙҙәрҙе аңлатҡанда, иң еңел ысул-тәржемә. Һүҙҙең мәғәнәһен һүрәт аша ла аңлатырға була. Сит тел уҡытыу буйынса методистар һуңғыһына өҫтөнлөк бирәләр.

3. Һүҙ менән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөүгә лә ваҡытты йәлләмәҫкә кәрәктер. Был һүҙҙәр артабанғы дәрестәрҙә лә ҡулланылырға тейеш. Кире осраҡта, һүҙлек эше мәғәнәһеҙ үткәрелгән ваҡытҡа тиң.

Ғәҙәттә, яңы һүҙҙәр хор менән, айырым, сылбырлап уҡытыла. Туймазы ҡалаһынының 7-се һанлы мәктәбе уҡытыусыһы Шәйхуллина З.Н. һүҙҙәрҙе хәтерҙә ҡалдырыуҙа ошондай юлдарҙы ҡуллана:

1. Бер уҡыусы һүҙҙе уҡый, тәржемәһен класс хор менән (йәки уҡыусы) уҡый.

2. Парта артында ултырыусы уҡыусының береһе – башҡортса, икенсеһе русса уҡый. Артабан икенсе парта дауам итә.

3. Бер уҡыусы һүҙҙе төрлө ерҙән йә башҡортса, йә русса уҡый. Икенсе уҡыусы тәржемәһен әйтә.

4. Уҡытыусы таҡтаны яба. Уның ҡулында яңы һүҙҙәр яҙылған карточкалар. Ул яҙыусы күрһәтмәй, ә балалар ниндәй һүҙ икәнен әйтергә тейештәр.

**3. План төҙөү.**

План төҙөү анализ һәм синтезды бергә тоташтыра. Әҫәрҙе мәғәнә яғынан тамамланған өлөштәргә бүлеү анализды, ә план төҙөү һәм исем биреү синтезды тәшкил итә.

План төҙөү күнекмәһе үҙенән-үҙе барлыҡҡа килмәй. Бының өсөн уҡыусыларҙы план төҙөүгә әҙерләйҙәр (II-III синыф).

*Әҙерлек эштәре.*

1. Формалашмаған тексты формаға индереү. Балалар бер-береһенә бәйләнеше булмаған һөйләмдәрҙе тәртипкә килтереп хикәйә төҙөйҙәр. Йөкмәткеһе яғынан эҙмә-эҙлекле килмәгән һөйләмдәрҙән эҙмә-эҙ итеп текст төҙөйҙәр.

2. Карточкаларға өлөштәрҙе берләштереп, бер дөйөм хикәйә төҙөү. Текст, әйтәйек, 5 өлөшкә бүленә, карточкаларға яҙыла, буталып балаларға таратыла. Бала, уларҙы уҡып, бәйләнешле хикәйә төҙөй.

3. Картиналарҙы уҡылған текстың йөкмәткеһенә тура килтереп һалып сығыу, картинаға исем биреү.

4. Бирелгән һөйләмдәрҙән оҡшаш йөкмәткеле ике хикәйә төҙөү.

5. Әҫәрҙең бүлектәрен дауам итеү.

1) Әбей икмәк бешерә.

2) Икмәк тәгәрәп китә.

3) ......................

6. Әҫәрҙе һорауҙар ярҙамында өлөштәргә бүлеү. Улар араһында бәйләнеште билдәләү.

7. Әҙер план буйынса әҫәрҙең өлөштәрен һайлап уҡыу.

8. Йөкмәтке буйынса буталып бирелгән бүлек исемдәрен тәртипкә килтереү.

9. «Туған тел» иктабында айырым хикәйәләргә ҡарата бирелгән бер картина аша башҡаларын уйлап табыу, уларға исем биреү.

Аслаев Т.Х. *Тексты бүлектәргә бүлеү* буйынса эште түбәндәгесә тәҡдим итә [2,3]:

1. Хикәйә тотош уҡыла.
2. Хикәйәнең инеш өлөшө табыла. Унын башланған һәм тамамланған урыны билдәләнә.
3. Хикәйәнең икенсе өлөшө табыла. Бүлектең башланыу һәм тамамланыу сиге билдәләнә.
4. Тексты‌ң ҡалған бүлектәре ошо рәүешсә табыла һәм сиге асыҡлана.
5. Бүлектәргә әҙер исемдәр тура килтереп һалына. Бүлектәрҙең исеменә тура килгән йөкмәтке хикәйәнән һайлап уҡытыла һәм бүлектең дөрөҫлөгө асыҡлана.

*План төҙөү буйынса түбәндәге эштәр ойоштороорға була:*

1. *Планды тест формаһында төҙөү.* М.Мосифуллин, «Төлкө менән ҡырмыҫҡа». (Туған тел; II кл.).

1. а) Ялkау кәзә
2. а) Kырмыҫkа менән осрашыу
б) Яуыз төлкө б) Kырмыҫkа иләүе
в) терәге балалары в) Төлкөнөң kырмыҫkа иләүен туҙҙырыуы.

*2. Пландарҙы сағыштырыу һәм уңышлыһын һайлау.*

А.Йәғәфәрова. «Сәнескеле күлдәк» (Туған тел, II кл.)

1) Яңы күлдәк 1) «Яңы күлдәк тектерәбеҙ»
2) Бүре 2) «Йәмһеҙ күлдәк кәрәкмәй»
3) Әсә һөйөүе 3) Күлдәгең булһа, мин һине ашар инем.

*3. Планды цитаталар менән алмаштырыу.* А.Ғирфанов, «Kайын» («Туған тел», III кл.).

1) Айҙар kайыны 1) «Ҙур булып үҫ»
2) Kайынды машина тапауы 2) «Айҙарҙың йөрәге жыу итеп kалды» һ.б.

*4. Планды тәртипкә килтереү, хаталарын төҙәтеү.*

Р.Ханнанов «Тырышkан – ташkа kаҙаk kаkkан» («Туған тел», III кл.).

1) Фәриттең хыялы – алмағас ултыртыу (елән)
2) Ағаһының (атаһының) ярҙамы һ.б.

*5. Планға тейешле һүҙҙәр һайлау.*

(Көслө, күҙ асkыһыҙ) буран (өрҙө, сыkты, уйнарға кереште)

*6. Пландың төшөп kалған өлөшөн табыу.*

*7. Хикәйәнең планын сюжетлы элементтар менән бәйләү.*

М.Әхмәтшин, «Kәрәҙле бал» («Туған тел», IV кл.).

1) Башы (төйөнләнеү) «Һуңғы kаршылыkkа етеп»
2) Ваkиғалар үҫеше Ярыш барышы
3) Кульминация Махсус бүләк
4) Һөҙөмтә (Сиселеш) Слетты асыу

Методист Аслаев Т.Х. *Пландың түбәндәге төрҙәрен билдәләй:*

- логик план;
- һайланма план;
- тематик план;
- цитаталы план.

*Тематик план* йомғаkлау дәрестәренә kарата төҙөлә. Әйтәйек, «Kыш» темаһы буйынса һөйләргә әҙерләнгәндә kулланыла.

*Һайланма план* текстың бер өлөшө буйынса һөйләргә әҙерләнгәндә нигеҙ булып тора. Мәҫәлән, Р.Рәхимғолованың

«Серле сәскәләр» хикәйәһе буйынса «Сәлимгәрәй бабай баkсаһы» тигән тема буйынса план төҙөтөлә.

*Логик план* әҫәрҙең инеш, йөкмәткеһе һәм һығымта өлөшөн генә үҙ эсенә ала. Унда һәр пункт әҫәрҙең төп идея-йөкмәткеһенең теге йәки был үҙенсәлеген аса, төп һыҙаттарын һанап сыға.

*Цитаталы план* өсөн бүлек иң әһәмиәтле тип һаналған төп фекерҙе үҙендә тотkан һөйләм йә һөйләм өлөшө һайлап алына.

План өҫтөндә эш текстың йөкмәткеһен һөйләргә әҙерләй.

Түбәндәге һөйләү төрҙәрен билдәләү:

1) текст теленә яkынайтып һөйләү, йәғни тулы һөйләү;

2) kыҫkартып һөйләү;

3) ижади һөйләү (анлогия нигеҙендә һөйләү; затты һәм заманды үҙгәртеп һөйләү; билдәле бер темаға kараған бер нисә әҫәрҙең йөкмәткеһен берләштереп һөйләү, бер хикәйә төҙөү; сәхнәләштереп һөйләү; уkығанды экранлаштырып һөйләү).

Тексты *дөрөҫ* һәм *тиҙ* уkыу буйынса уkытыусылар төрлө алымдар тәkдим итәләр. Мәҫәлән, Д.Ғәлимуллина ошондай алымдар тәkдим итә [4,3].

1. Тексты спринтлы уkыу (күҙ менән шәп темпта)
2. Разведкалы уkыу (эҙләнеүселәрҙән аңлашылмаған һүҙҙәрҙе таптырыу)
3. Буксир менән уkыу (уkытыусы менән бергә, уны тыңлап уkыу).
4. Яңғырауыkлы уkыу (уkытыусы артынан балалар kабатлап уkый).
5. Бер-беренде kыуып ет! (уkытыусы артынан балалар kабатлап уkый).

6) Иғтибарлы уkы! (Тексты уkытыусы менән бергә уkыу. Уkытыусы бер һүҙҙе йәки һөйләмде үҙгәртеп уkый, балалар, хатаны күреп, төҙәтергә тейештәр).
7) Йөкмәткегә тап килгән мәkәлдәр таптырыу.
8) Текстың йөкмәткеһе буйынса телдән һүрәттәр эшләтеү.
9) Балаларҙан текст йөкмәткеһенә kарата һорау kуйҙырып, яуап алыу.
10) Шиғырҙың строфаларын төрлө тиҙлектә уkытыу (тиҙәйткес темпында мәҫәлән).
11) Бер бала шиғырҙы теләһә ниндәй урындан уkый башлай, ә kалғандар дауам итә.

Ғайсина В. әҙәби анализлау буйынса *алгоритмдар* ҙа kуллана [3, 25].

## Тема һәм проблема

Был әҫәр нимә тураһында? Ул ни өсөн шулай атала?

Әҫәрҙе уkығанда (тыңлағанда) һеҙҙә ниндәй һорауҙар (фекерҙәр) тыуҙы?

Был әҫәр беҙҙе нимәгә өйрәтә? Уның төп әхлаkи фекере нимәлә?

## Сюжет

1. Хәл-ваkиғалар kайҙа һәм kасан бара?

2. Улар нисек башланып китә? Ваkиғалар артабан нисек үҫешә?

Хикәйәнең кульминацияһы йәғни хәл-ваkиғалар барышында көсөргәнеш мәле булып нимә тора?

3. Әҫәрҙе уkығанда ниндәй ваkиға нығыраk тетрәндерҙе? Ни өсөн?

4. Хикәйәнең сюжетын (төп ваkиғаһын) kыскаса һөйләп бир.

## Образдар. Геройҙар. Персонаждар

1. Әҫәрҙә кемдәр kатнаша?
2. Геройҙы тасуирлагыҙ.
3. Геройҙың төҫ-башын, kылыk-фиғелен һүрәтләгеҙ.
4. Геройҙың холkо ниндәй kыланыштарында яkшыраk асыла?
5. Ул башkалар хаkында, уның тураһында башkалар нимә ти?
6. Ә авторның фекере ниндәй?
7. Һеҙ кемдәрҙе ыңғай, кемдәрҙе кире герой тип һанайһығыҙ? Ни өсөн?
8. Ошо йәки башkа әҫәрҙәрҙәге был персонаждарға оkшаш геройҙарҙы атағыҙ. Тәүҙә оkшаш, һуңынан айырмалы яkтарын күрһәтегеҙ.
9. Үҙегеҙгә оkшаған герой тураһында һөйләгеҙ. *(... миңә бик оkшаны. Миңә... бик kыҙыk тойолдо. Минең хәтерҙә бигерәк тә ... kалды. Мин ... һоkландым.)*
10. Һеҙ үҙегеҙ kайһы яғығыҙ менән геройға оkшарға (оkшамаҫка) теләр инегеҙ?
11. Ниндәй мәkәл, әйтем йә kанатлы фраза геройҙың холkон яkшыраk аса?
12. Әгәр һеҙ рәссам булһағыҙ, ятраkkан геройығыҙҙы ниндәй мәлдә һүрәтләр инегеҙ? Уның йөҙ-kиәфәте, өҫ-башы ниндәй булыр ине? Тирә-яғына нимәләр эшләрһегеҙ?
13. Геройға ниндәй кәңәш бирер инегеҙ?

14. Геройҙың киләсәген нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?

## Композиция

1. Әҫәр ниндәй бүлектәрҙән тора?
2. Ни өсөн шулай уйлайһығыҙ?
3. Һәр бүлектәге төп хәл-вакиғаларҙы тасуирлағыҙ.
4. Уға ниндәй исем бирергә була?
5. Әҫәрҙә кем йәки нимә ентекле тасуирлана?
6. Ә кем йәки нимә тураһында ҡыҫҡаса бирелгән?
7. Ни өсөн?

## Әкиәтте анализлау

1. Әкиәтте уҡыгыҙ.
2. Уның ысынлап та әкиәт булыуын иҫбатлағыҙ.
3. Уның башын һәм аҙағын табығыҙ.
4. Әкиәттә нимә ысынбарлыктан алынған, нимә уйҙырма?
5. Әкиәттә нимә ҡыҙыҡһындырҙы: сюжетмы әллә тылсыммы? Әкиәттәге ниндәй тылсымлы нәмәләр тормошта осрай, ә нимәләр юҡ?
6. Әкиәттең ҡайһы мәле иң ҡыҙыҡлыһы?
7. Әкиәттәге ыңғай һәм кире образдарҙы атагыҙ. Уларҙың холҡондағы төп сифаттарҙы һанағыҙ һәм иң мөһим ҡылыҡтары хаҡында һөйләгеҙ.
8. Ҡайһы герой өсөн нығыраҡ борсолаһығыҙ? Герой менән бергә ниндәй хистәр кисерҙегеҙ.
9. Ниндәй мәҡәлдәр әкиәттең төп уйын белдерә? Уның төп фекере ҡайһы фразала сағыла?
10. Сюжеты, төп фекере һәм геройҙары буйынса оҡшашлыҡ булған башҡа әкиәттәрҙе беләһегеҙме?
11. Әкиәткә тап килгән мәҡәлдәрҙе һайлагыз?

## Мәҫәлде анализлау

1. Әҫәрҙе уҡығыҙ. Уны ни өсөн мәҫәл тип уйлайһығыҙ?
2. Мәҫәлдең төп фекерен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләп бирегеҙ.
3. Мәҫәл нисек яҙылған — проза менәнме әллә шиғырмы? Рифмаларҙы табығыҙ.
4. Мәҫәл кешеләге ниндәй етешһеҙлектәрҙән көлә?
5. Ниндәй фраза, әйтемдәр сағыуыраҡ, образлыраҡ, хәтерҙә яҡшыраҡ ҡала?
6. Мәҫәлдәге төп геройҙы ҡылыҡһырлағыҙ.

7. Мәҫәлдең төп фекерен ниндәй мәкәлдәр аса?

8. Мәҫәлдә нимә мәҙәк булып тойолдо, ә нимә өгөт-нәсихәт бирә?

**Һүрәтләү саралары буйынса эш** – тексты анализлауҙа мөһим бер этап. Укытыусы дәрескә әҙерләнгәндә үк һүрәтләү сараларын анализлауға иғтибар бирергә тейеш. Бының өсөн түбәндәге һөйләмдәрҙе kулланырға мөмкин:

1. Ошо юлдарҙы уkығыҙ. Автор ни әйтергә теләне икән?
2. Строфала бирелгән һүҙҙәргә иғтибар итегеҙ. Шағир ни өсөн ул һүҙҙәрҙе kулланған?
3. Һеҙ ул Һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?
4. Шағир kулланған һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәһен аңлатығыҙ.

Мәҫәлән, Ғ. Ибраһимовтың «Йәйге ямғыр» әҫәре буйынса һүрәтләү саралары өҫтөндә эш түбәндәгесә ойошторола.

- Хикәйәлә ямғыр алдынан булған күренеш нисек сағылдырылған?
- Ямғыр алдынан тәбиғәт нисек үҙгәрә?
- Ямғыр яуыу күренеше нисек бирелгән?
- Болоттар нимәгә оkшатылған? һ.б.

С. Kудаштың «Kар бөртөктәре» шиғыры буйынса түбәндәге һорауҙар бирергә мөмкин:

Ни өсөн шағир kар яуыуын «ынйыы яуа», «нур яуа» тип әйткән?

Ни өсөн шағир шиғырҙың бер юлында «бөркәнә», икенсеһендә «ябына» kылымын файҙаланған? һ.б.

Тасуири уkый һәм һөйләй белеү – уkыу оҫталығына эйә булыу тигән һүҙ. Тасуири уkыу тиҙ, дөрөҫ, аңлы уkыу һөҙөмтәһендә генә барлыkkа килә, уны уkыу күнекмәһенең иң юғары баҫkысы тип тә атайҙар.

Тасуири уkырға өйрәткәндә тасуири уkыу саралары һәм интонация компоненттары менән таныштырырға кәрәк. Йәғни уkыусы дөрөҫ тын алырға (һулыш), һүҙҙәрҙе, өндәрҙе асыk итеп әйтергә (дикция), тауышты урынлы итеп күтәрә һәм төшөрә белергә тейеш. Шулай уk пауза, баҫым, ритм, тембр, тиҙлек хаkында ла хәбәрҙар булыуы шарт. Тасуири уkырға өйрәтеү алымдары: хор менән уkыу, уkыусыларҙың уkыуын сағыштырыу, фоно, аудиояҙма kулланыу, текстың партитураһын төҙөү, ролләп уkыу, сәхнәләштереү һ.б. Укыуҙың был төрө буйынса Аслаев Т. Х. үҙенең хеҙмәттәрендә байтаk kына методик кәңәштәр бирә.

Kайһы бер уkытыусылар уkыусыларға тасуири уkыу өсөн ошондай памятка тәkдим итәләрK

Тектсы тасуири уҡырға нисек әҙерләнергә

1. тексты иғтибар менән уҡы. Геройҙың, авторҙың тойғоһон, кәйефен, уйҙарын асыҡла.

2. ваҡиғаларға (геройҙарға) үҙендең мөнәсәбәтенде билдәлә.

3. уларҙы күҙ алдына баҫтыр.

4. тыңлаусыларға нимә хәбәр итергә, ниндәй тойғоларҙы еткерергә — бөтәһен дә хәл ит.

5. шуға ярашлы тон, тиҙлек һайла, баҫым, паузаларҙы билдәлә.

6. тексты тәүҙә үҙ алдыңа уҡы. Уҡыуың менән ҡәнәғәтһеңме. Тойғоларҙы дөрөҫ сағылдырҙыңмы? Тасуири уҡыу аша һин тыңлаусылар менән аралашаһың — шуны онотма.

7. Тексты тасуири уҡы.

Дәрестә тасуири уҡыуға әҙерлек уҡыусы етәкселегендә ойоштorола. Әңгәмә аша әҫәрҙәге күренештәргә, геройҙарға ҡараш асыҡлана, авторҙың текстҡа ҡарата фекерен, образдарҙы һәм уларҙың кисерештәрен аңлау өсөн анализ яһала. Артабан тексты уҡыу өсөн дөрөҫ тиҙлек, тембр һ.б. һайлана.

Уҡыусылар уҡып күрһәтә. Әңгәмә аша дөрөҫ вариантты һайлау ойоштorола. Уҡытыусы артынан хор менән ҡабатлап уҡыу, аудиояҙма тыңлау һәм уҡыусыларҙың уҡыуын сағыштырыу, уҡыусыларҙың уҡыуын магнитофонға яҙҙырып анализлау кеүек ҡыҙыҡлы эштәр башҡарырға мөмкин.

Ҡайһы бер текстар сәхнәләштереү өсөн уңайлы. Бының өсөн атрибуттар әҙерләнә, әңгәмә аша геройҙарҙың характеры асыҡлана, уларҙың һөйләшеү, манераһы, мимикаһы билдәләнә. Һәр ваҡиға нисек сәхнәләштерергә тейеш — шуның хаҡында һөйләшеү үткәрелә. Ролдәр бүленә, әҙерлек эштәренән һуң әҫәр йәки уның өҙөгө сәхнәләштерелә. Аҙаҡ класс менән анализ яһала.

# Кулланылған әҙәбиәт


1. Аҙнағолов Р.Ғ. һ.б. 5-9 кластарҙа башҡорт телен уҡытыу методикаһы. Өфө, 1996. - 320 б.
2. Аслаев Т.Х. Башланғыс мәктәптә уҡыу методикаһы. Өфө, 1980. - 320 б.
3. Ғәбитова З. Текст йөкмәткеһен һөйләргә өйрәтеү // Башҡортостан уҡытыусыһы. - 2006. - №5. - 43-44 б.
4. Ғайсина В. Әҙәби әҫәрҙе анализлау // Башҡортостан уҡытыусыһы. - 2007. - №3. - 25-26 б.
5. Ғәлимуллина Д. Текст өҫтөндә эш алымдары // Башҡортостан уҡытыусыһы. - 2003. - №7. - 40-42 б.
6. Иҙелбаев М. Әҙәбиәт буйынса инеш дәрестәр // Башҡортостан уҡытыусыһы. - 2007. - №8. - 56 б.
7. Исҡужина. Әҙәби тексҡа дөйөм анализ // Башҡортостан уҡытыусыһы. - 2008. - №8. - 21-22 б.
8. Кубасова О.В. Выразительное чтение. М.Ҡ Издательский центр «Академия», 2001. - 144 с.
9. Кү збанова Р. Бөгөнгө әҙәбиәт дәресе ниндәй булырға тейеш? // Башҡортостан уҡытыусыһы. - 2007. - №5. - 31 б.
10. Уйылданова Г. Хикәйәгә план төҙөү. // Башҡортостан уҡытыусыһы. - 2008. - №1. - 26-сы б.